*Фина ЛАТИПОВА*

# Ҡайҙа һуң бөгөнгө герой?

Кем ул хәҙерге заман кешеһе? Кем ул бөгөнгө әҙәбиәттең геройы? Был һорау яҙыусыларҙы, тәнҡитселәрҙе генә түгел, китап, журнал уҡыусыларын ла борсойҙор.

Хәҙерге заман кешеһен дә күреп, аңлап бөтөүе еңел түгел. Кем ул хәҙерге көндөң алдынғы вәкиле? Зыялы затмы? Эшҡыуармы? «Яңы урыҫ» йә бүтән милләт кешеһеме?

Замандың алдынғы идеяларын, яңыса ҡараштарын, демократик принциптарын алға һөргән, күптәргә үрнәк булып торған юғары интеллектлы һәм культуралы шәхестер ул. Беҙ күрергә теләгән кешеләр.

Әҙәбиәттәге яңы герой ана шундай заман кешеһенең типик характерын, халыҡтың юғары рухи, эстетик зауығын, уй-фекерҙәрен, йәшәйешен сағылдырыр бер образ булырға тейештер. Ә инде шул герой концепцияһының фәнни нигеҙҙәрен прозала, поэзияла, драматургияла күрһәткән мәшһүр публицистарыбыҙ, тәнҡитселәребеҙ ҙә бар бит арабыҙҙа. Заман геройы мәсьәләһе тураһында киң фекер алышыу Башҡортостан яҙыусыларының йыйылышында ла ҡуйыла, мәҡәләләрҙә күтәрелә.

Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Динис Бүләков, Әхиәр Хәким, Ноғман Мусин, Рәшит Солтангәрәев һ.б. өлкән яҙыусыларыбыҙ әҫәрҙәрендә шундай заман геройының төрлө образдарын күрәбеҙ. Йәшерәк быуын яҙыусыларынан Әмир Әминев, Ринат Камал, Ғәлим Хисамов, Фәрзәнә Аҡбулатова, Гөлсирә Ғиззәтуллина һ.б. хәҙерге йәмғиәтебеҙҙәге үҙгәрештәрҙе сосораҡ тотоп ала, бөгөнгө кешеләр образын үҙенсә күрергә һәм күрһәтергә тырыша.

Әммә, бөгөнгө герой «йөҙөндә беҙ үҙебеҙҙең замандаштарҙы — иң тәүҙә илдә барған ваҡиғалар уртаһында ҡайнаусы, массаларҙы ойоштороусы, үҙ артынан эйәртеүсе, киң масштабта фекерләүсе, тәрән кисерештәргә бай, әкренләп булһа ла иманына ҡайтыусы» (Р. Шаһиев) образдарҙы әҙәбиәттә күрәбеҙме? Бөгөнгө көндә ундай геройҙың күңеле, рухы, йәне «ҡабырсаҡта» ята түгелме?

Һуңғы йылдарҙа йәш тауыштар үҙҙәрен ишеттерә. Шағирҙар Р. Түләков, Ә. Үтәбай, Д. Шәрәфетдинов, Й. Ильясова, Х. Юлдашев, Т. Искәндәрова, Т. Дәүләтбирҙина, С. Әбүзәров, З. Ҡотлогилдина, М. Кәбиров, Б. Исҡужин һ.б. йәш быуынды күҙ алдында тотам.

Әлеге заман геройының әҙәбиәткә оҙаҡ килеүенең сәбәбе ҡайҙа ята? Беренсенән, йәмғиәттең ижтимағи, сәйәси-иҡтисади торошондалыр. Яҙыусылар бөгөнгө буталсыҡ осорҙа бер фекергә килә алмайҙар, сөнки булып торған үҙгәрештәрҙең асылы нимәлә һәм улар йәмғиәтте ҡайҙа илтеүен аныҡ ҡына төшөнә алмайҙар кеүек, тиһәк, дөрөҫ булыр. Улай тиһәң, үҙ тауышы булған публицистар, шағирҙар был осорҙоң кәмселектәрен киҫкен асып һалалар. Шағир Р. Шәкүр әйтмешләй:

Илде ҡайҙа алып бараһығыҙ,
Эй һеҙ, Әпкәләйҙән ҡалғандар?
Уйын ҡорған булып, ил яҙмышын
Аяҡ аҫтарына һалғандар?
Рәсәй, һине кемдәр кимерә?
Кемдәр һине емерә?
Кемдәр алды власты?
Кемдәр шуға юл асты?
Беҙ шунда уйнайбыҙмы?
Уйнап беҙ туймайбыҙмы?

Бында, әлбиттә, һорауҙар ғына, ә яуаптарын кем бирер? Шулай уҡ, Ризван Хажиев та: «Әлбиттә, йәмғиәтебеҙ бөгөн ауыр осор кисерә. Илебеҙ бер төркөм «демократтар» ҡулында, «яңы урыҫтар», «яңы башҡорттар», «яңы татарҙар» барлыҡҡа килде. Ә халыҡ, ҡара һарыҡ һымаҡ, уларға буйһоноп, булғанына шөкөр итеп, асльtкта, яланғаслыҡта йәшәргә мәжбүр. Эшһеҙлек, енәйәтселек көндән-көн арта, сәнәғәт предприятиелары туҡталып ҡалды. Ауыл хужалығы көрсөккә килеп терәлде, илдә ер менән һатыу итеү башланды. Ошондай киҫкен, ил азатлығына, ил бойондороҡһоҙлоғона ҡурҡыныс янаған мәлдә беҙҙең публицистар, яҙыусылар ҡыйағай баҙар мөнәсәбәттәренә ҡарата үҙҙәренең тос һәм тапҡыр һүҙҙәрен әйтергә, властарҙан бындай «шайтан туйын» бөтөрөүҙе талап итергә, Герцен һымаҡ, саң һуғырға, хәйерселектән сығыу юлдарын бергәләп эҙләргә тейеш ине һымаҡ. Ләкин беҙ власть чиновниктарын серәкәй һымаҡ ҡына семетеп алыуҙан, еңелсә генә тәнҡитләүҙән

уҙғаныбыҙ юҡ, ә Башҡортостанда унығы ла юҡ кимәлендә. Бөтә бөгөнгө публицистика тик маҡтауға ҡоролған, тиһәм дә, артыҡ хата булмаҫтыр. Маҡтауҙа ла, тәнҡиттә лә сама кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта республиканың яйлап-яйлап ҡына, Рәсәйҙең башҡа төбәктәре артынан иҡтисади, ижтимағи, социаль һәм сәйәси яр ситенә яҡынлашыу фактын урап үтәбеҙ, уларҙы күрмәмешкә һалышабыҙ.

Аҙмы ни беҙҙә күтәреп сығаһы проблемалар? Тик уларҙы өйрәнергә, ҡолас ташлап яҙырға, эфир тулҡындарын шаулатырға кешеһе генә юҡ. Май сыҡмағанын күрә тороп та, һаман да шул бер сүбәкте сәйнәйбеҙ, йәнәһе, беҙҙә бөтәһе лә тыныс, бөтәһе лә һил, бөтә проблемалар ҙа хәл ителгән. Бүре лә туҡ, һарыҡ та имен.

Ҡыҙҙырылмаған ҡояшҡа ҡыҙынып йәшәү дәүерҙәре үтте бит, йәмәғәт!» — тип асынып яҙа. («Ағиҙел», №9, 1999 йыл). Тимәк, бүтән сәбәптәр ҙә бар. Тағы Р. Шәкүрҙең шиғырынан өҙөк килтерәйек:

Милләт өсөн, халҡым өсөн, тиеп,
Ҡояш нурҙарына уралдым.
Халҡым өсөн, ерем, һыуым, күгем,
Илһам алдым һеҙҙән, йыр алдым.
Исемдәре хатта юғалһа ла,
Шағирҙан һүҙ ҡала, ҡала һүҙ.
Шиғри һүҙҙә илдең тел асҡысы,
Шиғри һүҙҙәр ерҙә үлемһеҙ.

Шулайҙыр ҙа. Әммә, хәҙерге көндә, баҙар мөнәсәбәттәрендә, беҙҙең ижади интеллигенция үҙе ни хәлдә һуң?

Барыһы ла ижад менән бар көсөн, һәләтен биреп шөғөлләнә аламы? Юҡтыр. Сөнки бер йәш прозаиктың: «Аслыҡтан үлмәҫ өсөн төрлө ерҙә эшләйбеҙ, хеҙмәт хаҡы ла түбән, йәшәү шарттары ла бик һәйбәт түгел. Ижадҡа ваҡытыбыҙ әҙ ҡала, гонорарҙар әҙ түләнә», — тип зарланғанын ишеткәйнем. Был яҙыусыларға ғына түгел, сәнғәт кешеләренә лә ҡағыла. Театрҙарҙың репертуарында ла еңел-елпе әйберҙәр йыш күренә башланы. Тимәк, драматургтар ҙа әлегә бөгөнгө заман геройҙарының йөҙөн таба алмай ыҙалана. Былай булһа, халыҡ та «зауыҡ» тигән төшөнсәне онота һалып, еңел әйберҙәр менән күңел бушлығын тултырып, уны «ысын ижад» тип уйлай башлар.

Тимәк, сәбәптәрҙең береһе ижади интеллигенцияның түбән матди-финанс кимәлдә йәшәүенә бәйле. Өсөнсөнән, йәш көстәр булып та, яҙған әйберҙәрен баҫтыра алмай интегә. Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең финанс хәле шәптән түгел.

Иллә мәгәр йәш көстәрҙе ваҡытында «күтәреп ебәрмәһәң», йөрәгендә ышаныс тыуҙырмаһаң, әлеге заман геройы ахыр заманға ҡалып бер сүбәк сәйнәлер инде.

Хәҙер статистика мәғлүмәттәренә күҙ һалайыҡ. Был анкеталарҙы республиканың 20 төбәгендә тултырғандар: йәштәрҙең 18 проценты Рәсәйҙең 1917—1970 йылдарҙағы тарихын инҡар итә. Был ошо осорҙа ижад ителгән әҫәрҙәрҙе лә кире ҡағыу тигән һүҙ. Шулай итеп, тағы ла әлеге заман геройы, яңы әҫәрҙәр кәрәклеге иҫбат ителә. Йәштәр араһында бер ҡараусыһы булмағандар — 31,1%, енәйәтселек — 26,5%, милләт байлығын талау — 25,1%, сәнғәт һәм әхлаҡ төшөнсәләренең түбәнәйеүе — 24,9%, эшһеҙлек — 42%, халыҡтың деградацияланыуы 31,3% тәшкил итә.

Хәҙерге йәштәр (анкета буйынса) гәзиттән иң элек «массовая культура» темаһына мәҡәләләрҙе уҡыйҙар, икенсе урында — «светская хроника», өсөнсө — «тауар рекламалары», «көнкүреш-йәшәйеш», дүртенсе — мәҙәни-әхлаҡи, секс, ял итеү темалары тора («Ватандаш», №1, 2000 йыл). Күреүегеҙсә, йәштәр хәҙерге осорҙа үҙҙәренә идеал таба алмай ыҙаланып, көнбайышҡа баға. Уларҙың гәзит, китап, фильмдарында «кич», «секс-пропаганда», «көнбайыш йәшәйеше» хаҡында материалдар етерлек. Ә беҙ ҡайһы осорҙо «Ватан, милләт, тел» тиеп үрнәк итеп килтереп ҡуйыйыҡ һуң?

Әлеге заман быуыны – «юғалған быуын». Ул социализм идеологияһынан бушанған, ә күңел бушлығын тултырыр өсөн яңы идеология юҡ, ижадта ла шулай.

Яҙыусы Р. Мифтахов әйтмешләй:

Ахмаҡтарҙы атҡа мендерҙеләр:
Аталарын хатта танымайҙар.
Туҡай, Бабич ҡәләмдәре кәрәк:
Тағы тыуҙы ярлы, баҙар, байҙар...

«Быларҙың бөтәһе лә ваҡытлыса, әлбиттә. Белмәҫһең, бөгөн дан туртаһын һемереүселәр иртәгә онотолорҙар, йәки, үҙҙәренә тейешле урынды алырҙар. Өҫкә икенсе йәш исемдәр ҡалҡып сығыр. Ваҡыттың бит — үҙ иләге, ул заманға яраҡлашмай» — тип яҙа шағир Марат Кәримов («Ағиҙел», №9, 1999 йыл).

Амин, шулай булһын. Өсөнсө меңйыллыҡҡа аяҡ баҫҡанда йәштәрҙе, үҫеп килгән быуынды башҡорт менталитеты рухында, халҡыбыҙ традициялары үрнәгендә тәрбиәләүгә өлөш индереүсе ижади хеҙмәттәр бик тә кәрәк.

Тыуған республикаңа, туған халҡыңа оло мөхәббәт, уны матди, рухи байыҡтырырға ынтылыш, ҙур эштәр алда торорға тейеш. Милләт, милләт, тип һөйләүҙән би-

герәк, уны конкрет эштәрең, хеҙмәттәрең менән нығытырға, ысын патриот булырға кәрәк. Әҙме ни әле беҙҙең арала милли яҙмышҡа, киләсәгенә битараф ҡараған әҙәмдәр, хатта етәксе кешеләр. Беҙгә милләт берҙәмлеген, милләт-ара татыулыҡты, берҙәм хәрәкәтте көсәйтәһе бар. Халыҡтың милли үҙаңын уятыу, яңы идеалдар, фекерҙәр туплау, йәштәребеҙҙә тарихыбыҙға яңыса ҡараш тәрбиәләү мөһим. Әгәр беҙ барса йүнәлештәрҙе бергә ҡарап, башҡа милләттәр ҡыҙыҡһынырлыҡ ижад ҡомартҡыларыбыҙҙы төрлө телдәрҙә баҫтырып, киң донъяға сыҡмаһаҡ, милләт киң танылыу таба алмаясаҡ. Рухи тамырҙарыбыҙҙы юғалтмайынса, халыҡтың милли рухын һындырмайынса, йәш быуыныбыҙҙы үҙебеҙ яңы бейеклектәргә күтәрәйек. Халҡыбыҙ күңелендәге бушлыҡ, буталсыҡлыҡ, ҡибла юғалтыу тойғоһон бөтөрөү өсөн хөкүмәтебеҙ, ителлигенциябыҙ, һәммәбеҙ ҙә үҙ өлкәһендә ең һыҙғанып эшләргә тейеш. Халыҡты патриотик рухта, инициативалы, юғары эстетик зауыҡта тәрбиәләүҙә хәҙерге әҙәбиәтебеҙҙең роле ҙур.

Китап уҡыусылар яҙыусыларыбыҙҙан яңы заманға ауаздаш, өлгө алырлыҡ образдар, юғары художестволы әҫәрҙәр көтә.